# Ҡасҡын Һамаров тамырынан

Районыбыҙҙың «Азатлыҡ» гәзитендә «Ауылымдың бөгөнгөһө — уның үткәнендә лә» тигән мәҡәләм баҫылып сыҡҡас, миңә төрлө һорау менән мөрәжәғәт итеүселәр булды.

Эҙләнә торғас, бер ҡыҙыҡ нәмәгә тап булдым. Хәҙерге ваҡытта Ҡомъяҙы ауылында Ғәббәс нәҫеле күп таралған икән. Әле 1859 йылда уҡ ауылда йәшәүсе 227 кешенең 70-е Ғәббәс нәҫеленән булып, шуларҙың 44-е ир-ат булған.

Бөгөнгө Ҡомъяҙы кешеләре Шәмси Вәлиев, Вәсфирахман Шәйәхмәтов, Мансур, Рәдис Усмановтар, Ғабдрахман Суфиянов, Шәмси һәм Мәжит Асҡаровтар, Хафис Хажимәрҙәнов, Линус Усманов, мәрхүм Миҙхәт Борханов, Садрислам һәм Зикаф Борхановтар, тағы бер нисә ғаилә Ғәббәс нәҫеленән булып сыға.

Иҫке Балтас ауылында ғына шул нәҫелдән (ир-ат яғынан) — 10, ҡатын-ҡыҙ яғынан 7 ғаилә йәшәй. Ғәббәс нәҫеленән Томск өлкәһендә 2 ғаилә, Свердловск өлкәһендә —8, Мәскәүҙә — 1, Украинала — 2, Нефтекамала — 2, Өфөлә 3 ғаилә иҫәпләнә.

«Атай мәрхүмдең иҫтәлектәрендә, беҙ бер тарихи зат — Ҡасҡын нәҫеленән булырға тейешбеҙ, тигән яҙыу бар. Шундай исем осраманымы?» — тип мөрәжәғәт итте Әҙип Аҡмалетдин улы Вәлиев.

1859 йылғы ревизия кенәгәһендә 45 йәшлек Әбделваһаб Иҙрис улы Ҡасҡынов теркәлгән. Уның Вәлиәхмәт исемле 23 йәшлек улы күрһәтелгән. Вәлиәхмәттең 1862 йылда Фәрхиямал исемле ҡыҙы, 1867—1869 йылдарҙа Ғәлинур һәм Дауыт исемле улдары тыуа. Ғәлинур — Әҙип Вәлиевтың, ә Дауыт Рәфҡәт Дауытовтың олаталары булып сыға. Шулай итеп, Ғәлинуровтар һәм Дауытовтар Ҡасҡын нәҫеленән килә.

Быуындар сылбыры буйынса иҫәпләһәк, Ҡасҡындың 1750 йылдар тирәһендә тыуғанын самаларға була. Аҡмалетдин бабайҙың тарихи зат тип яҙғаны шул Ҡасҡын Һамаровҡа тура килергә тейеш тигән уй тыуа. Сөнки ревизия кенәгәләрендә Ҡасҡын исеме бүтән осрамай. Ҡасҡын Һамаров крәҫтиәндәр күтәрелеше йылдарында, Пугачевтың полковнигы булараҡ, Салауат Юлаев менән йәнәшә һуғышҡан.

«Салауаттың дуҫтары һәм дошмандары» тигән тарихи яҙмаһында («Известия Башкортостана». 1996 й. 39—40-сы һандар) Ғ.Шафиҡов түбәндәгеләрҙе бәйән итә: «1773—75 йылдарҙа Башҡортостан территорияһында Крәҫтиәндәр һуғышы тураһындағы тарихи документтар йыйылмаһында Ҡаранай Моратов һәм Ҡасҡын Һамаровтарҙың исеме бик күп ҡабатлана». Ысынлап та, 430 биттән торған бер нисә йөҙ документта Ҡасҡын Һамаров исеме 36-сы биттә иҫкә алына.

Әсирлеккә эләккән полковник Һамаров 1774 йылда Ҡазанға Йәшерен комиссияға оҙатыла. Уға Ҡаранай менән бергә Пугачевты язалағанды күрһәтәләр.

Ҡасҡын 1773 йылдың декабрендә үк «Россия императоры» исеменән хәрби хеҙмәткә саҡырыу тураһында указдар яҙа. Шул ваҡыттарҙа уға полковник дәрәжәһе бирелә.

Генерал-майор Фрейман үҙенең 1773 йылдың 7 октябрендә яҙған рапортында 400 башҡорттан торған команданың Польшанан ҡайтыу менән старшина Ҡасҡын Һамаров етәкселегендәге ихтилалсыларға йәки Пугачев армияһына ҡушылыуын күрһәтә.

Генерал Тимашев Өфө канцелярияһына ебәргән рапортында (1774 йылдың 7 октябре) Крәҫтиәндәр һуғышына етәкселек итеүсе Ҡаранай, Ҡасҡын — барлығы алты старшинаның тотолоуы тураһында яҙа.

Тотолғандан һуң Ҡасҡын Һамаров, әле буйһонмаған старшиналарҙы ҡаршылыҡ күрһәтеүҙән туҡтарға өгөтләргә тип, азат ителә. Документтар йыйылмаһында уның артабанғы яҙмышы тураһында мәғлүмәттәр юҡ.

*Зәбир Усманов, Балтас районы.*



10-2001.p65 204 02.11.01, 15:38